Башҡортостан Республикаһының муниципаль район Учалы районының Исхаков Алмас Сәлим улы исемендәге Уральск ауылы муниципаль бюджет белем биреү учреждениеһе урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| «МБ-ла ҡаралды»<br>ММБ етәксеһе<br>_____З.Р.Фазлетдинова<br>Протокол № 1<br>«30» август 2022 й. | «Килешелде »<br>Директор урынбаҫары<br>_____Д.Ә.Сәйетхужина<br><br>«31» август 2022 й. | «Раҫлайым »<br>МБДББУ Уральск ауылы<br>УДББМ директоры<br>_____Ә.Р Етимбаева<br>Приказ № 154<br>«31» 08 2022 й. |

# «Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәте» курсынан
## 1-4 синыф өсөн эш программаһы

**«Туған (башҡорт) тел»** 1класс, (33 сәғәт), З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й

**«Туған (башҡорт) әҙәбиәте»** 1 класс (66 сәғәт), З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й.

**«Туған (башҡорт) тел»** 2 класс (34 сәғәт), З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й.

**«Туған (башҡорт) әҙәбиәте»** 2 класс(68 сәғәт),З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й.

**«Туған (башҡорт) тел»** 3 класс (34 сәғәт), З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й.

**«Туған (башҡорт) әҙәбиәте»** 3класс (68 сәғәт),З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й.

**«Туған (башкорт) тел»** 4 класс (17 сәғәт), З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й.

**«Туған (башҡорт) әҙәбиәте»** 4 класс (51 сәғәт),З.Ғ.Нафиҡова. Ф.Ф.Мортазина, 2017й

**1-4 кластар өсөн туған (башҡорт) тел һәм (башҡорт) әҙәбиәтенән уҡытыу программаһы.**

**I.** Дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары уҡыусылар һәм уҡытыусылар алдына түбәнге ***талаптарҙы һәм бурыстарҙы*** **ҡуя:**

1.Уҡыусының уҡыу эшенә, белем алыу эшмәкәрлегенә үҙен өйрәтеү, фекерләү, аҡыл-аң ҡеүәһен үҫтереү; үҙен уратып алған һәр нәмәгә, күренешкә, хәл-ваҡиғаға үҙҡарашы, баһаһы булған шәхес итеп үҫтереү.

2. Башҡорт балаларының күпселеге мәктәпкә үҙ телендә һөйләшеп килә. Рус теленә өйрәтеү балаларҙың башҡорт телендә алынған белемдәренә нигеҙләнеп өйрәтелә.
3.Телде аралашыу, кешеләр менән хеҙмәттәшлек итеү, мөнәсәбәт ҡороу ҡоралы итеп күҙаллап өйрәтеү.
4.Башланғыс мәктәптә туған тел уҡытыуҙы, уҡытыу- тәрбиә эшен халҡыбыҙҙың бай мираҫына ҡороу шарт.
5.Башланғыс мәктәптә уҡытылған бүтән фәндәрҙе – рус теле һәм әҙәбиәте, тәбиғәтте өйрәнеү, математика, һынлы сәнғәт, музыка өлкәһендәге белемдәрен башҡорт теле предметы менән тығыҙ бәйләнештә уҡытыу мөһим.
Башланғыс мәктәптә башҡорт теле дәрестәрендә белем биреүҙең ***төп бурыстары:***

- туған телдә камил һөйләшеү, фекереңде еткерә белеү, тел һәм телмәр күнекмәләрен тәрән үҙләштереүгә өлгәшеү;
- уҡыусыларҙың төрлө эшмәкәрлекте үҙләштереүҙәренә ирешеү, универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү;
- башҡорт халҡының рухи мираҫын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;
- дәреслек, өҫтәмә материал, һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт менән эш итеү күнекмәләрен камиллаштырыу;
- уҡыусыларҙың логик фекерләү һәләттәрен үҫтереү.

Программаның бурыстарын тормошҡа ашырыу өсөн заманса эш методтарын һәм алымдарын ҡулланырға кәрәк. Дәрестә уҡыусыларға төплө белем нигеҙҙәре, ныҡлы күнекмәләр биреү менән бергә, уларҙың танып белеү эшмәкәрлеген һәм фекерләүен үҫтереүсе, дөйөм үҫешен тәьмин итеүсе алымдар һәм саралар менән файҙаланыу мотлаҡ талап булып тора.

**1 “Башҡорт теле”предметы йөкмәткеһендә тәрбиәүи йүнәлеш ҡиммәттәрен һүрәтләү**

Рәсәй мәғарифын модернизациялау концепцияһы тураһындағы законында төп йүнәлештәрҙең береһе булып баланы шәхес итеп формалаштырыу тора. Был йүнәлештә уҡытыу эшен ойоштороу – программаның төп *талаптарының* береһе.
Шәхес ул:

- башҡорт теленең фәнни-теоретик нигеҙҙәрен белгән, үҙ теленең төп үҙенсәлектәрен тәрән тойомлаған, туған телендә иркен һөйләшкән кешеләр менән аралашыу мәҙәниәтенә эйә булған;
- белем алыу, уҡымышлы, мәғлүмәтле булыуға, үҙенә кәрәк информацияны үҙ аллы эҙләү һәм уға эйә булыу һәләте булған;
- мәктәптә алған белемдә тормош ситуацияларына сығарыуға һәләтле булған; алған белемде стандарт булмаған ситуацияларҙа ҡуллана белеүсе;
- хаталаныуҙан ҡурҡмай, ышаныслы эш итеүсе; яңылышҡанда эшләнгән хаталарҙың сығанағын асыҡлай һәм анализлай белгән, уларҙы булдырмау юлдарын билдәләп, хата эшләнгән эштәрҙән фәһем ала белеүсе;
- үҙен уратып алған һәр объектҡа, күренешкә үҙ фекере, ҡарашы булған;
- социаль әхлаҡи ҡанундарға эйә булыусы; кеше ҡайғыһын, зарын аңлай белеүсе; тотороҡло рухлы, матур эске мәҙәниәтле, алдынғы ҡарашлы кеше;
- хислелек, үҙеңдең хис-тойғоларыңды аңлай һәм билдәләй (әйтә) белеү;
- башҡа кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу;
- матурлыҡ тойғоһо – тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш;
- нәфис һүҙҙең матурлығын тоя белеү,үҙеңдең телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
- ғаилә ҡиммәттәрен аңлау, үҙеңдең яҡындарыңа ҡарата ихтирам, рәхмәт, яуаплылыҡ тойғолары*;*
- текст авторы менән диалог ҡороуға ҡыҙыҡһыныу,уҡыуға ихтыяж*;*
- үҙеңдең һәм әйләнә-тирәңдәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;
- мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсеэтик тойғолар – намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып ғәфү үтенеү.

**2. “Башҡорт теле” предметтарын өйрәнеү һөҙөмтәләре**

Яңы стандарттарға ярашлы уҡыу сифатын өйрәнгәндә, йәғни тикшереү процесында, түбәндәге **һөҙөмтәләр** күҙаллана:
шәхси үҫеш кимәле;метапредмет кимәле; предмет буйынса белем кимәле.
**Шәхси үҫеш кимәле**. Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.
**Метапредмет кимәле**. Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡырға, белем алырға өйрәтеү.
**Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү**: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлек баланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлекте уның тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабул итеүен, әйләнә- тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү.
Ойоштороу эшмәкәрлеге танып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлаштырыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала.
Танып белеү эшмәкәрлеге тейешле мәғлүмәтте эҙләп табыу һәм анализлауҙы, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүҙе һәм ҡулланыуҙы тәьмин итә.
Аралашыу эшмәкәрлеге белем алыу процесында аралашырға өйрәнеүҙе ойоштороуға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.
**Предмет кимәле**. Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.
Шәхси үҫеш кимәле
«Башҡорт теле» предметын үҙләштергәндә, уҡытыусы шәхси үҫеш кимәлен үҫтереү бурысын ҡуя:
-телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;
-тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларыңды белдереү;
-кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
-уҡылған әҫәрҙәрҙең геройҙарына һәм уларҙың эшенә ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү.
Метапредмет кимәле
Ойоштороу эшмәкәрлеге:
-уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
-дәрестә эш барышын һөйләп барыу;
-дәреслек материалы менән эшләү барышында уйҙы, фаразды әйтеү;
-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләү;
-коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү.
Танып белеү эшмәкәрлеге:
-дәреслектең, матур яҙыу өлгөләренең айышына төшөнөү (тышы, йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
-дәреслектән, текстан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
-бергәләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
- ҙур булмаған тексттың йөкмәткеһен һөйләү.
Аралашыу эшмәкәрлеге:
-фекереңде телдән формалаштырыу;
-кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау;
-тыңлай белеүҙең уңышлы аралашыуға шарт булыуын үҙләштереү;
-тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
-уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү тураһында килешеү.

**Предмет үҙләштереү кимәле**

-тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
-бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ уҡыу;
-тексты ентекле һөйләй белеү;
-хикәйә төҙөү;
-һүҙҙең өндәрен атау, ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, хәреф-өн анализы яһау;
-һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын баш хәреф менән яҙыу;
-һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу;
-баҫма тексты күсереп яҙыу, һүҙҙәрҙе һәм ҙур булмаған һөйләмдәрҙе диктант итеп яҙыу;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу.

**«Башҡорт (дәүләт) теле» предметының өйрәнеү (шәхси, предмет-ара һәм предмет) һөҙөмтәләре:**

- тел кешеләрҙең аралашыу сараһы икәнде аңлау, үҙләштереү;
- башҡорт телен милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;
- дөрөҫ һөйләү теле һәм яҙма тел кешенең индивидуаль мәҙәнилеге күрһәткесе;
- үҙ телмәренә иғтибарлы булып үҙ-үҙен баһалау һәләтлеге.

Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүҙең ***предмет-ара (метапредметные) һөҙөмтәләр***е булып түбәндәгеләр инә:

- белем алыу (уҡыу-уҡытыу) бурыстарын хәл итеү өсөн төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәт табыу маҡсатында телде ҡуллана белеү оҫталығы;
- аралашыуҙың маҡсаты, бурыстары, сараһы, тел шарттарында ориентирлашыу;
- телмәрҙе һәм аралашыу ситуацияһын иҫәпкә алып, коммуникатив бурыстарҙы (диалог, монологик телмәр, яҙма текстар) уңышлы атҡарыу маҡсатында, адекват телмәр сараларын һайлап ала белеү;
- үҙ фекереңде һәм позицияңды мөмкин тиклем теүәл итеп аңлатырға ынтылыу;
- һорауҙар биреү оҫталығы.

Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүҙең предмет ***(предметные) һөҙөмтәләр*****енә түбәндәгеләр инә:**

- башҡорт әҙәби теле нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләре тураһында башланғыс төшөнсә алыу;
- орфографик ҡағиҙәләрҙе һәм тыныш билдәләрен (өйрәнелгән күләмдә) ҡуйыу ҡағиҙәләрен белеү;
- өн, хәреф, һүҙ өлөшө, телмәр киҫәге, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек (өйрәнелгән күләмдә) тел берәмектәрен таба, сағыштыра, классификациялай (бүлә), ҡылыҡһырлай (характеристика биреү) алыу оҫталығы;
- үҙеңдең ғәмәлдәрҙе контролдә тотоу, әйткәнде һәм яҙғанды тикшерә белеү

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө.**

Рус һәм башҡа мәктәптәрҙә телде белмәгән балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәре:

1. Балаларҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтеү үҙәк урынға ҡуйыла.
2. 4-се класта башҡорт телен өйрәнеү өсөн уҡытыу планында аҙнаға 3-әр сәғәт ваҡыт бирелә. Был дәрестәрҙә балаларҙы башҡортса һөйләшергә, уҡырға, элементар яҙырға өйрәтеү бергә алып барыла. Тел менән әҙәби материал бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
3. Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**2. Программа буйынса башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары:**

**Танып белеү маҡсаты**

Уҡыусылар башҡорт халыҡ мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихи үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген белергә һәм аңларға, хөрмәт итергә, әҙәбиәт-сәнғәт вәкилдәренең ижади ҡаҙаныштары менән үҙенең рухи үҫешен байыта алыу мөмкинлеген файҙаланырға тейеш.

Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы, уның халҡы, башҡорт халҡының республикала төп, ерле халыҡ булыуы, башҡорт халыҡ ижады, билдәле шәхестәр, уларҙың эштәре, ижады менән таныштырыу башланғыс этапта танып белеү маҡсатының йөкмәткеһен тәшкил итә.

**Үҫтереү маҡсаты**

Белем биреү маҡсаты методика фәнендә бик оҙаҡ йылдар буйы иң беренсе маҡсат итеп һаналды. Ләкин башҡа дидактик маҡсаттарҙы икенсе урында ҡарау белем биреү маҡсатының тейешле дәрәжәлә тормошҡа ашырылмауына килтерә. Шәхестең белемле булыуы уның фекерләү һәләте үҫешенән тора. Уҡытыу процесында үҫтереү, тәрбиә маҡсаттарын даими күҙаллап эшләү- сифатлы белем биреүҙең беренсе шарты (Л.С.Выготский). Был хәҡиҡәтте бигерәк тә башланғыс кластарҙа, балаларҙың белем алыу эшмәкәрлегенә башланған осорҙа иҫтә тотоу мөһим.

Башланғыс этапта балаларҙың психик үҫешен түбәндәге йүнәлештәрҙә үҫтереүгә айырыуса иғтибар талап ителә:

- Фекерләүҙе үҫтереү менән бәйле психик функциялар: логик фекерләү, сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен табыу, индуктив, дедуктив фекерләү;
- Хәтерҙе үҫтереү (ихтыярлы, ихтыярһыҙ), иғтибарлылыҡты үҫтереү;
- Аралаша белеү һәләтен үҫтереү (аралашыусанлыҡ, хисلелек, эмпатия хистәре);
- Ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ , әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтереү.

**Тәрбиәүи маҡсат**

Уҡыусыларҙың тейешле дәрәжәләге тәрбиәһенән башҡа уҡытыу процесын ойоштороу мөмкин түгел. Әлбиттә, уҡытыусының шәхси сифаттары, уҡыусы менән махсус ойошторолған мөғәләмәһе уҡытыу һәм тәрбиә процесында ҙур роль уйнай. Ләкин тәрбиә процесы беренсе сиратта уҡытыуҙың йөкмәткеһе һәм методтары менән бәйле. Тимәк, уҡытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда, материалдың тәрбиәүи мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу- программа һәм дәреслек авторҙары өсөн төп талап. Балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, уларҙы ҡыҙыҡһындырған, әхләҡи проблемаларҙы үҙ эсенә алған йөкмәтке, беренсенән, уҡытыу процесында тәрбиәүи функция башҡарһа, икенсенән, туранан-тура коммуникатив мотивация тыуҙырыу менән бәйле. Программаға балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған, әхләҡи проблемаға эйә булған бәләкәй күләмле әҙәби әҫәрҙәр һәм автор текстары индерелде.

**Белем биреү маҡсаты**

Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү бурысы үтәлә.

- **Һөйләү телмәрен үҫтереү:**

1) картина буйынса һөйләү;
2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;
3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;
5)үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.

- **Ишетеп аңлау (аудирование):**

1) уҡытыусының дәрес, уйын ситуациялары менән бәйле һорауҙарын, күрһәтмәләрен аңлау;

2) әңгәмәләштәшенең таныш материалға нигеҙләнгән һөйләмен аңлау, уға мөнәсәбәтен белдереү;
3) тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу;
4) әҙәби әҫәрҙәрҙең, текстарҙың йөкмәткеһен тыңлап аңлау;
5) аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау.

**Уҡыу телмәрен үҫтереү:**

1) аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
2) текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
3) тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;
4) унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;
5) бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.

- **Яҙыу телмәрен үҫтереү**
  1) айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу;
  2) матур яҙыу күнекмәләре;
  3) байрам открыткалары яҙыу;
  4) һүҙлек диктанты яҙыу.

## II.Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр

**А. Шәхси сифаттарҙы үҫтереү.**

1. Уҡыу процесында белем алыуға ҡарата яуаплылыҡ булдырыу, уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә; тиҫтерҙәренә, уҡытыусыға ҡарата ихтирамлы булыу;
2. Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡараш булдырыу;
3. Тыуған ил, ер, тел төшөнсәләре тураһында аң-белем биреү;
4. Һау-сәләмәт йәшәү рәүешен үҙләштереү.

**Б. Предмет һөҙөмтәләре.**

Уҡыу йылы аҙағында 1-се класс уҡыусылары түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға, һаналған эштәрҙе үтәй белергә тейештәр:

1.Башҡорт теленең бөтә өндәре һәм хәрефтәре, өн менән хәрефтең айырмаһы.
2. Һүҙгә өн анализы яһау, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар, тартынҡыларҙы айыра алыу, уларҙы дөрөҫ әйтеү, шулар нигеҙендә һүҙҙәртөҙөү.
3. **Кем? Нимә? Кемдәр? Нимәләр?** Һорауҙарына һәм уларға яуап булған һүҙҙәрҙе белеү, телмәрҙә ҡулланыу.
**Ни эшләй? Ни эшләне?** Һорауҙарын ҡуллана белеү.
**Ниндәй? ҡайҙа? Нисә?** Һорауҙарының мәғәнә үҙенсәлектәрен аңлау, уларға яуап биреү.
**Минең, һинең, уның, һеҙҙең, уларҙың** алмаштарының мәғәнәләрен төшөнөү, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.
4. Һүҙҙәрҙе ижекләп дөрөҫ, аңлы уҡыу.
5. Әкиәт, шиғыр, хикәйә, йомаҡтар, көләмәстәр тыңлау, уҡыу, кәрәк саҡта яуаптарын табыу һәм йөкмәткеһен һөйләү. Уҡыған, ишеткән, үҙе күргәндәр тураһында бәйләнешле итеп һөйләү.
6. Таныш темаға телдән хикәйә төҙөп һөйләү, уҡытыусы биргән һорауға яуап яҙыу.
7. Яҙма һәм баҫма текстарҙы күсереп яҙыу. Яҙылышы ауыр булмаған һүҙҙәрҙе, 2-3 һүҙҙән торған типик һөйләмдәрҙе тәүҙә күсереп, унан диктант итеп яҙыу.
8. Һөйләм аҙағында нөктә, һорау билдәһе ҡуя белеү.
9. Һүҙҙе юлдан-юлға күсереү,ижеккә бүлеү
10.Кешеләрҙең исем- фамилияларын,хайуандарҙың ҡушаматын,географик атамаларҙы баш хәреф менән яҙыу

**Уҡыу**

-ҙур булмаған текста башҡорт өндәрен дөрөҫ итеп ҡысҡырып уҡыу,
-был тексты үҙ аллы аңлы уҡыу,

**Яҙыу**

-текстан һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу,
-өлгөгә ҡарап ҡотлау хаттары яҙыу.

**В. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү.**

1.Үтенес менән уҡытыусыға, класташыңа, өлкәндәргә өндәшеү.

2. Уҡыу объектын өйрәнеү процесында күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау һәм һығымта яһау.

3. Аралашыу оҫталығын шымартыу, кеше фекерен ихтирам итеү.

4. Диалог, монолог ҡора белеү.

5. Мәғлүмәт алыу сығанаҡтары менән эш итә белеү.

6. Парлап, төркөмдә эшләгәндә этикет ҡағиҙәләрен үтәү. Эште планлаштырыу, уны тормошҡа ашырыу.

**III. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

I класта һөйләү һәм яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә һәм өс этаптан тора:

**1. Әлифбаға тиклемге осор**. Башҡортостан. Танышыу. Минең мәктәбем. Минең яратҡан уйындарым, уйынсыҡтарым. Беҙ һанарға өйрәнәбеҙ. Ниндәй төҫ матур? Йәшелсәләр. Емештәр. Магазинда. Ҡоштар. Тән өлөштәре. Көн режимы. Мин һәм минең ғаиләм. Кейем-һалым. Аяҡ кейемдәре. Йәйге һәм ҡышҡы кейемдәр. Йорт хайуандары һәм ҡоштары. Ҡырағай хайуандар. Ҡыш. Яңы йыл. Ҡышҡы уйындар.

Төрлө белем менән килгән уҡыусыларҙы башҡортса һөйләшергә, башҡорт әҙәби теленең үҙенсәлекле өндәрен танырға, ишетә һәм әйтә белергә, элементар формала диалог төҙөргә, һөйләгәнде һәм уҡығанды аңларға өйрәтеү төп урында тора. Хәрефтәрҙе өйрәнеүгә әҙерлек эше: моделдәр, схемалар, терәк сигналдар ярҙамында ижектәр, һүҙҙәр төҙөү, ижектә, һүҙҙә нисә өн (хәреф) булыуын, өндәрҙең нәҙек һәм ҡалын булыуын билдәләү, уларҙың дөрөҫ әйтелешен үҙләштереү.

**Әлифба осоро** . Башҡорт теленең алфавиты. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре менән танышыу. Башҡорт һәм рус телдәрендә А, О, Ы, Э хәрефтәрен һәм өндәрен сағыштырыу. Үҙенсәлекле өн һәм хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Башҡорт телендә В хәрефенә фонетик анализ.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен дөрөҫ әйтергә, хәрефтәрен дөрөҫ яҙырға өйрәтеү. Ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеүгә, уларҙың мәғәнәләрен аңлай һәм айыра белергә күнектереү.

Балаларҙы уҡырға, яҙырға, текст менән эшләргә өйрәтеү. Дәреслектә бирелгән материалды дөрөҫ итеп ижекләп, һуңға табан һүҙләп уҡырға күнектереү. Текстарҙы матур итеп, дөрөҫ, тейешле интонация менән уҡырға өйрәтеү, йөкмәткене аңлау һәм һөйләү күнекмәләре формалаштырыу.

**III. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**Туған(башҡорт теле) 1 класс 33сәғәт, аҙнаһына 1 сәғәт**

| **№п/п** | **Тема** | **Сәғәт һаны** |
|---|---|---|
| 1 | Кем? нимә? һорауына яуап биргән һүҙҙәр. | 6 |
| 2 | Башҡорт телендә ҡулланылған өн-хәрефтәр. Башҡорт алфавиты. | 27 |
| | **Бөтәһе:** | **33 сәғәт** |
| | | |

**Туған(башҡорт ) әҙәбиәте 1 класс 66 сәғәт, аҙнаһына 2 сәғәт**

| **№п/п** | **Тема** | **Сәғәт һаны** |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу. | 4 |
| 2 | Беҙҙең мәктәп. | 15 |
| 3 | Беҙҙең баҡса. | 6 |
| 4 | Йыл миҙгелдәре. | 3 |
| 5 | Ғаилә. | 4 |
| 6 | Кейемдәр. | 6 |

| | | |
|---|---|---|
| 7 | Хайуандар. | 8 |
| 8 | Яңы йыл. | 2 |
| 9 | 8 март- Әсәйҙәр байрамы. | 2 |
| 10 | Уйындар. | 2 |
| 11 | Һаумыһығыҙ .Хәйерле көн. | 2 |
| 12 | Башҡортостаным - илем. | 3 |
| 13 | Миҙгелдәр. | 5 |
| | **Бөтәһе:** | **66 сәғәт** |

## 2-се синыф буйынса

1. **Танып белеү маҡсаты**

Уҡыусылар башҡорт халыҡ мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихи үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген белергә һәм аңларға, хөрмәт итергә, әҙәбиәт-сәнғәт вәкилдәренең ижади ҡаҙаныштары менән үҙенең рухи үҫешен байыта алыу мөмкинлеген файҙаланырға тейеш.

Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы, уның халҡы, башҡорт халҡының республикала төп, ерле халыҡ булыуы, башҡорт халыҡ ижады, билдәле шәхестәр, уларҙың эштәре, ижады менән таныштырыу башланғыс этапта танып белеү маҡсатының йөкмәткеһен тәшкил итә.

**2. Үҫтереү маҡсаты**

Белем биреү маҡсаты методика фәнендә бик оҙаҡ йылдар буйы иң беренсе маҡсат итеп һаналды. Ләкин башҡа дидактик маҡсаттарҙы икенсе урында ҡарау белем биреү маҡсатының тейешле дәрәжәлә тормошҡа ашырылмауына килтерә. Шәхестең белемле булыуы уның фекерләү һәләте үҫешенән тора. Уҡытыу процесында үҫтереү, тәрбиә маҡсаттарын даими күҙаллап эшләү - сифатлы белем биреүҙең беренсе шарты (Л.С.Выготский). Был хәҡиҡәтте бигерәк тә башланғыс кластарҙа, балаларҙың белем алыу эшмәкәрлеге башланған осорҙа иҫтә тотоу мөһим.

Башланғыс этапта балаларҙың психик үҫешен түбәндәге йүнәлештәрҙә үҫтереүгә айырыуса иғтибар талап итерә:

- Фекерләүҙе үҫтереү менән бәйле психик функциялар: логик фекерләү, сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен табыу, индуктив, дедуктив фекерләү;
- Хәтерҙе үҫтереү (ихтыярлы, ихтыярһыҙ), иғтибарлылыкты үҫтереү;
- Аралаша белеү һәләтен үҫтереү (аралашыусанлыҡ, хислелек, эмпатия хистәре);
- Ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ , әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтереү.

3. **Тәрбиәүи маҡсат**

Уҡыусыларҙың тейешле дәрәжәләге тәрбиәһенән башҡа укытыу процесын ойоштороу мөмкин түгел. Әлбиттә, укытыусының шәхси сифаттары, укыусы менән махсус ойошторолған мөғәләмәһе укытыу һәм тәрбиә процесында ҙур роль уйнай. Ләкин тәрбиә процесы беренсе сиратта уҡытыуҙың йөкмәткеһе һәм методтары менән бәйле. Тимәк, укытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда, материалдың тәрбиәүи мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу - программа һәм дәреслек авторҙары өсөн төп талап. Балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, уларҙы ҡыҙыҡһындырған, әхләҡи проблемаларҙы үҙ эсенә алған йөкмәтке, беренсенән, укытыу процесында тәрбиәүи функция башҡарһа, икенсенән, туранан-тура коммуникатив мотивация тыуҙырыу менән бәйле. Программаға балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған, әхләҡи проблемаға эйә булған бәләкәй күләмле әҙәби әҫәрҙәр һәм автор текстары индерелде.

**4. Белем биреү маҡсаты**

Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү бурысы үтәлә.

- **Һөйләү телмәрен үҫтереү:**

1) картина буйынса һөйләү;
2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;
3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;
5) үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.

- **Ишетеп аңлау (аудирование):**
  6) уҡытыусының дәрес, уйын ситуациялары менән бәйле һорауҙарын, күрһәтмәләрен аңлау;
  7) әңгәмәләштәшенең таныш материалға нигеҙләнгән һөйләмен аңлау, уға мөнәсәбәтен белдереүе;
  8) тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу;
  9) әҙәби әҫәрҙәрҙең, текстарҙың йөкмәткеһен тыңлап аңлау;
  10) аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау.
  - **Уҡыу телмәрен үҫтереү:**
    6) аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
    7) текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
    8) тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;
    9) унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;
    10) бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.
  - **Яҙыу телмәрен үҫтереү**
    5) айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу;
    6) матур яҙыу күнекмәләре;
    7) байрам открыткалары яҙыу;
    8) һүҙлек диктанты яҙыу.

**III. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**Туған(башҡорт теле) 2 класы 34 сәғәт, аҙнаһына 1 сәғәт**

| **№п/п** | **Тема** | **Сәғәт һаны** |
|---|---|---|
| 1 | Һаумы, мәктәп! | 2 |
| 2 | Минең мәктәбем | 3 |
| 3 | Минең республикам | 5 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм | 6 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым | 9 |
| 6 | Мине уратып алған донъя | 9 |
| | **Бөтәһе:** | **34 сәғәт** |

**Туған(башҡорт) әҙәбиәте 2 класс, 68 сәғәт, аҙнаһына 2 сәғәт**

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Һаумы, мәктәп! | 2 |
| 2 | Минең мәктәбем | 10 |
| 3 | Минең республикам | 5 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм | 24 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым | 14 |
| 6 | Мине уратып алған донъя | 13 |
| | **Бөтәһе:** | **68 сәғәт** |

**3-сө синыф буйынса**

**Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар**

**1. Танып белеү маҡсаты**
Уҡыусылар башҡорт халыҡ мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихи үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген белергә һәм аңларға, хөрмәт итергә, әҙәбиәт-сәнғәт вәкилдәренең ижади ҡаҙаныштары менән үҙенең рухи үҫешен байыта алыу мөмкинлеген файҙаланырға тейеш. Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы, уның халҡы, башҡорт халҡының республикала төп, ерле халыҡ булыуы, башҡорт халыҡ ижады, билдәле шәхестәр, уларҙың эштәре, ижады менән таныштырыу башланғыс этапта танып белеү маҡсатының йөкмәткеһен тәшкил итә.
**2. Үҫтереү маҡсаты**
Белем биреү маҡсаты методика фәнендә бик оҙаҡ йылдар буйы иң беренсе маҡсат итеп һаналды. Ләкин башҡа дидактик маҡсаттарҙы икенсе урында ҡарау белем биреү маҡсатының тейешле дәрәжәлә тормошҡа ашырылмауына килтерә. Шәхестең белемле булыуы уның фекерләү һәләте үҫешенән тора. Уҡытыу процесында үҫтереү, тәрбиә маҡсаттарын даими күҙаллап эшләү - сифатлы белем биреүҙең беренсе шарты (Л.С.Выготский). Был хәҡиҡәтте бигерәк тә башланғыс кластарҙа, балаларҙың белем алыу эшмәкәрлеге башланған осорҙа иҫтә тотоу мөһим.
Башланғыс этапта балаларҙың психик үҫешен түбәндәге йүнәлештәрҙә үҫтереүгә айырыуса иғтибар талап ителә:
· Фекерләүҙе үҫтереү менән бәйле психик функциялар: логик фекерләү, сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен табыу, индуктив, дедуктив фекерләү;
· Хәтерҙе үҫтереү (ихтыярлы, ихтыярһыҙ), иғтибарлылыҡты үҫтереү;
· Аралаша белеү һәләтен үҫтереү (аралашыусанлыҡ, хисселек, эмпатия хистәре);
· Ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ , әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтереү.
**3. Тәрбиәүи маҡсат**
Уҡыусыларҙың тейешле дәрәжәләге тәрбиәһенән башҡа уҡытыу процесын ойоштороу мөмкин түгел. Әлбиттә, уҡытыусының шәхси сифаттары, уҡыусы менән махсус ойошторолған мөғәләмәһе уҡытыу һәм тәрбиә процесында ҙур роль уйнай. Ләкин тәрбиә процесы беренсе сиратта уҡытыуҙың йөкмәткеһе һәм методтары менән бәйле. Тимәк, уҡытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда, материалдың тәрбиәүи мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу - программа һәм дәреслек авторҙары өсөн төп талап. Балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, уларҙы ҡыҙыҡһындырған, әхләҡи проблемаларҙы үҙ эсенә алған йөкмәтке, беренсенән, уҡытыу процесында тәрбиәүи функция башҡарһа, икенсенән, туранан-тура коммуникатив мотивация тыуҙырыу менән бәйле. Программаға балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған, әхләҡи проблемаға эйә булған бәләкәй күләмле әҙәби әҫәрҙәр һәм автор текстары индерелде.
**4. Белем биреү маҡсаты**
Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр
эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына башҡорт телен туған тел буларaҡ өйрәнеү бурысы үтәлә.
**· Һөйләү телмәрен үҫтереү:**
1) картина буйынса һөйләү;
2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;
3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;
5) үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.
**· Уҡыу телмәрен үҫтереү:**
1) аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
2) текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
3) тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;

4) унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;
5) бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.

### 3.Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө

**III класта** һөйләү һәм яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә бүленә.

**Әҙәбиәт.**

Һаумы, мәктәп! Йәйҙе иҫкә төшөрөү. Алтын көҙ. Һөнәрҙәр. Нимә яҡшы, нимә насар. Әкиәттәр. Ҡыш. Урал тәбиғәте. Ҡаһарманлыҡ юлы. 8 Март - Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. Яҙғы тәбиғәт. Балаларҙың тормошо һәм эштәре. Йәй.

### III класс.

**А. Шәхси сифаттарҙы үҫтереү.**

1. Үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау;
2. Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу;
3. Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына ҡарата һаҡсыл булыу;
4. Тыуған илде яратыу, ерҙе, телде һаҡлау;
5. Һаулыҡты ныҒытыу.
6. Ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булыу, файҙалы ял итеү;
7. Кеше менән аралашыу этикетын үҙләштереү.

**Б. Предмет һөҙөмтәләре.**

1. Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙе уҡыған тексты аңлай алыу.
2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм, билдәле ситуация буйынса әңгәмәлә ҡатнаша алыу.
3. Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу; логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү.
4. Һүҙ төркөмдәрен айыра белеү.

**В. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү.**

1. Үҙ аллы белем алыу, мәғлүмәт йыйыу һәм уларҙы ҡуллана белеү.
2. Дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләү; дәрескә маҡсат ҡуйыу һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белеү һәм тормошҡа ашырыу, эште дөрөҫ планлаштырыу, эҙләнеү эше алып барыу.
3. Эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләү.
4. Тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшеү, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштереү.
5. Эшләгән эштәрен дөрөҫ баһалау һәм кәрәк саҡта төҙәтмәләр индереү.

**Туған(башҡорт теле) 3 класс, 34 сәғәт, аҙнаһына 1 сәғәт**

| №п/п | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1 | Телмәр | 2 |
| 2 | Текст | 3 |
| 3 | Һөйләм киҫәктәре. | 4 |
| 4 | Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. | 5 |
| 5 | Тартынҡы өндәр. | 4 |
| 6 | Исем. | 10 |
| 7 | Ҡылым | 3 |
| 8 | Сифат | 2 |
| 9 | Алмаштар | 1 |
| | **Бөтәһе:** | **34 сәғәт** |

**Туған (башҡорт) әҙәбиәте 3 класс 68 сәғәт, аҙнаһына 2сәғәт**

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу | 4 |
| 2 | Минең мәктәбем | 7 |
| 3 | Минең республикам | 14 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм | 14 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым | 13 |
| 6 | Мине уратып алған донъя | 16 |
| | **Бөтәһе:** | **68 сәғәт** |

**II. Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр**

**1. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар:**

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү:
- текстың планын төҙөү;
- текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү, билдәле ситуацияла тексты ижади дауам итеү.
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү:
- ҡараған фильм, картина, ишеткәндәр, бирелгән ситуация буйынса хикәйә төҙөп һөйләү;
- ваҡиғаға, геройҙарҙың эштәренә, ҡылыҡтарына баһа биреү, үҙ фекеңде иҫбатлау;
- тестағы образлы һүҙҙәрҙе, һүрәтләү-тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;
- 10-12 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белеү.
3. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу:
- тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
- гәзит-журналдарҙан, китаптарҙан материал йыйып, хикәйә төҙөү;
- әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү;
- текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәр менән эш итә белеү.
4. Хәрефтәрҙе дөрөҫ һәм матур яҙыу, дөрөҫ тоташтырыу:
- Ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалар яҙыу;
- Иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.
5. Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).

**2. Уҡытыу һөҙөмтәләренә талаптар:**

**I. Шәхси һөҙөмтәләр**

- башҡорт теленең БР-да дәүләт теле булыуын аңлау һәм төшөнөү;
- башҡорт теленән алынған белем һәм күнекмәләрҙе мәктәптә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу;
- аралашыуҙа рус теленән алған белемде башҡорт телендә тәржемә итеп ҡуллана белеү;
- башҡорт телен башҡорт халҡының мәҙәни һәм рухи байлығын өйрәнеү сараһы булараҡ ҡулланыуҙы аңлау;
- төрлө социаль ситуацияларҙа оло кешеләр һәм үҙ тиңдәштәрең менән хеҙмәттәшлек күнекмәләрен үҫтереү.

**II. Предмет һөҙөмтәләре.**

- яңғыраған телмәрҙе (ололарҙың һәм тиңдәштәреңдең әйтеүе, балалар тапшырыуҙары, аудиояҙмалар һәм мәғлүмәти технологияның башҡа формаларын) адекват ҡабул итеү;
- һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе, өндәрҙе һәм һөйләмде төҙөү, әйтеү буйынса белем һәм күнекмәләр;
- бирелгән тема буйынса диалог төҙөй белеү; һорауҙарға ҡыҫҡа һәм тулы итеп яуап биреү, диалогты башлай һәм тамамлай белеү;

- әҙерләнеп һәм әҙерләнмәй етеҙ, аңлап һәм тасуири уҡыу, тексты ҡыҫҡа һәм һайлап һөйләй белеү;
- таныш булған орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланып, уҡытыусы ярҙамында һәм үҙ аллы өйрәнеүҙә контроль характерҙа яҙма эштәрҙе башҡара белеү;
- үҙ аллы эшен тикшерә һәм башҡорт теленән предмет-ара (башҡа предмет дәрестәрендә) үҙ белемеңде анализлай белеү;
- ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙыу; иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.
- төп предметтан предмет-ара аңлатмаларҙы үҙләштереү;
- мәктәптә һәм мәктәптән тыш ҡыҙыҡһыныуҙарынан сығып, башҡорт телендә аралашыу.

**III. Уҡыуҙа универсаль эш төрҙәре**

- телмәрҙе телдән ҡабул итеү һәм төп йөкмәткене аңлау;
- башҡорт теленең фонетик төҙөлөшөнөң төп берәмектәрен белеү; тартынҡы һәм һуҙынҡыларҙы, өн һәм хәрефтәрҙе айыра белеү, ижектәргә бүлеү, дөрөҫ әйтеү һәм баҫым;
- рус телендә булмаған өндәрҙе һәм өн ҡушымсаларын дөрөҫ әйтеү;
- һүҙҙәрҙе, грамматик формаларҙы һәм уларҙың барлыҡҡа килеүҙәрен, элементар синтаксик конструкцияларҙы һәм уларҙың һөйләмдә һәм бәйләнешле телмәрҙә ҡулланылышын үҙләштереү;
- баш хәрефтең яҙылышын, һүҙҙәрҙең ижеккә бүленеүен, тыныш билдәләрен яҙыу ҡағиҙәләрен белеү;
- уҡыу һәм көндәлек аралашыу шарттарында үҙләштерелгән белем һәм күнекмәләрҙе ҡулланыу; диалогты дауам итеү; үҙләштерелгән лексиканы ҡулланып һорауға яуап биреү һәм үҙ аллы һорау биреү, тексты һөйләп биреү, картина буйынса һөйләм төҙөй белеү, тематик өлгө буйынса төрлө темаға монологик текст төҙөй белеү;
- ҡысҡырып һәм үҙ аллы уҡый белеү, айырым һөйләм һәм тулыһынса тексты тасуири уҡыу;
- тексты өлөштәргә бүлә белеү, уларға исем биреү, план төҙөү, биремде яҙып бөтөрә һәм әйтеп бирә белеү, предметты һәм картинаны һүрәтләй белеү һ. б;
- уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
- телдең милли мәҙәниәттең сағылышы һәм аралашыу ҡоралы булыуын ҡабул итеү; башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ әһәмиәтен аңлау.

## 4-се синыф буйынса:

**Программа буйынса башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары:**

**1.Танып белеү маҡсаты**

Уҡыусылар башҡорт халыҡ мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихи үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген белергә һәм аңларға, хөрмәт итергә, әҙәбиәт-сәнғәт вәкилдәренең ижади ҡаҙаныштары менән үҙенең рухи үҫешен байыта алыу мөмкинлеген файҙаланырға тейеш.

Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы, уның халҡы, башҡорт халҡының республикала төп, ерле халыҡ булыуы, башҡорт халыҡ ижады, билдәле шәхестәр, уларҙың эштәре, ижады менән таныштырыу башланғыс этапта танып белеү маҡсатының йөкмәткеһен тәшкил итә.

**2. Үҫтереү маҡсаты**

Белем биреү маҡсаты методика фәнендә бик оҙаҡ йылдар буйы иң беренсе маҡсат итеп һаналды. Ләкин башҡа дидактик маҡсаттарҙы икенсе урында ҡарау белем биреү маҡсатының тейешле дәрәжәлә тормошҡа ашырылмауына килтерә. Шәхестең белемле булыуы уның фекерләү һәләте үҫешенән тора. Уҡытыу процесында үҫтереү, тәрбиә маҡсаттарын даими күҙаллап эшләү - сифатлы белем биреүҙең беренсе шарты (Л.С.Выготский). Был хәҡиҡәтте бигерәк тә башланғыс кластарҙа, балаларҙың белем алыу эшмәкәрлеге башланған осорҙа иҫтә тотоу мөһим.

Башланғыс этапта балаларҙың психик үҫешен түбәндәге йүнәлештәрҙә үҫтереүгә айырыуса иғтибар талап итələ:

- Фекерләүҙе үҫтереү менән бәйле психик функциялар: логик фекерләү, сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен табыу, индуктив, дедуктив фекерләү;
- Хәтерҙе үҫтереү (ихтыярлы, ихтыярһыҙ), иғтибарлылыҡты үҫтереү;
- Аралаша белеү һәләтен үҫтереү (аралашыусанлыҡ, хислелек, эмпатия хистәре);
- Ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ , әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтереү.

4. **Тәрбиәүи маҡсат**

Уҡыусыларҙың тейешле дәрәжәләге тәрбиәһенән башҡа уҡытыу процесын ойоштороу мөмкин түгел. Әлбиттә, уҡытыусының шәхси сифаттары, уҡыусы менән махсус ойошторолған мөғәләмәһе уҡытыу һәм тәрбиә процесында ҙур роль уйнай. Ләкин тәрбиә процесы беренсе сиратта уҡытыуҙың йөкмәткеһе һәм методтары менән бәйле. Тимәк, уҡытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда, материалдың тәрбиәүи мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу - программа һәм дәреслек авторҙары өсөн төп талап. Балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, уларҙы ҡыҙыҡһындырған, әхләҡи проблемаларҙы үҙ эсенә алған йөкмәтке, беренсенән, уҡытыу процесында тәрбиәүи функция башҡарһа, икенсенән, туранан-тура коммуникатив мотивация тыуҙырыу менән бәйле. Программаға балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған, әхләҡи проблемаға эйә булған бәләкәй күләмле әҙәби әҫәрҙәр һәм автор текстары индерелде.

**4. Белем биреү маҡсаты**

Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү бурысы үтәлә.

- **Һөйләү телмәрен үҫтереү:**

1) картина буйынса һөйләү;
2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;
3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;
5) үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.

- **Ишетеп аңлау (аудирование):**
    11) уҡытыусының дәрес, уйын ситуациялары менән бәйле һорауҙарын, күрһәтмәләрен аңлау;
    12) әңгәмәләштәшенең таныш материалға нигеҙләнгән һөйләмен аңлау, уға мөнәсәбәтен белдереү;
    13) тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу;
    14) әҙәби әҫәрҙәрҙең, текстарҙың йөкмәткеһен тыңлап аңлау;
    15) аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау.
    - **Уҡыу телмәрен үҫтереү:**
        11) аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
        12) текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
        13) тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;
        14) унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;
        15) бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.
    - **Яҙыу телмәрен үҫтереү**
        9) айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу;
        10) матур яҙыу күнекмәләре;
        11) байрам открыткалары яҙыу;һүҙлек диктанты яҙыу.

**Туған(башҡорт теле) 4 класс, 17 сәғәт, аҙнаһына 0,5 сәғәт**

| №п/п | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1 | Телмәр | 1 |
| 2 | Текст | 2 |
| 3 | Эйә менән хәбәр.Эйәрсән киҫәктәр. | 3 |
| 4 | Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр.Һүҙ составы | 2 |
| 5 | Исем | 2 |
| 6 | Сифат.Сифат дәрәжәләре | 2 |
| 7 | Һан. Ябай һәм ҡушма һандар | 2 |
| 8 | Алмаш | 1 |
| 9 | Ҡылым | 2 |
| | **Бөтәһе:** | **17 сәғәт** |

**Туған (башҡорт) әҙәбиәте 4 класс 51 сәғәт, аҙнаһына 1,5 сәғәт**

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу | 3 |
| 2 | Минең мәктәбем | 5 |
| 3 | Минең республикам | 18 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм | 12 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым | 7 |
| 6 | Мине уратып алған донъя | 6 |
| | **Бөтәһе:** | **51 сәғәт** |

**2) Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты:**

1) "Башҡорт теле" уҡыу ҡлланмаһына эш дәфтәре: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 2-се класы өсөн (башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүселәр өсөн). Ф. Ф. Мортазина, З. Ғ. Нафиҡова. - 2-се баҫма. - Өфө : Китап, 2016.- 84 бит.

2) Дәреслек: Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 2-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүселәр өсөн). Ф.Ф.Мортазина, З.Ғ. Нафикова. – Өфө: Китап, 2015.

3) Омонимдар (аҙаш һүҙҙәр) һүҙлеге, М.Х.Әхтәмов, Өфө: Китап, 2006

4) Русса- башҡортса уҡыу- уҡытыу тематик һүҙлеге, З.Ф.Әбүбәкирова, Өфө: Аукцион+, 2007

5) Русско- башкирский учебный словарь, Саяхова Л.Г., Ураксин З.Г., Асадуллина Ф.Ф., Сахипова З.Г., Уфа: Китап, 2001

6) Урыҫса- башҡортса һүҙлек, З.Ғ.Ураҡсин, Өфө: Башҡорт энциклопедияһы, 2005

**II. Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр**

**1. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар:**

**Тыңлап аңлау:**

- уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;
- иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
- текста ҡапма-ҡаршы йәки бер үк мәғәнәле һүҙҙәрҙе таба белеү;
- текстың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.

**Һөйләү:**

- ишеткәндәр, башҡарған эштәр, күҙәтеүҙәр буйынса һөйләү;
- бәләкәй күләмле тексты уҡып, йөкмәткеһен һөйләү;
- һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү;
- диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү;
- ябай ғына кимәлдә монолог ҡора башлау;

- үҙе тураһында, ғаилә ағзаларының туғанлыҡ мөнәсәбәте буйынса атамаларын, яҡындарының исем-фамилияларын белеү, һөнәри шөғөл-дәре һ.б. тураһында һөйләү;
- башҡорт теленән руссаға һәм руссанан башҡортсаға тәржемә итеү;
- һөйләшеүҙә өндәш һәм әҙәплелек һүҙҙәрен ҡуллана белеү;
- ике куплетлы шиғырҙар (5-6), йырҙар (3-4), уйындар белеү. Уҡыу:
- тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар ниге-ҙендә);
- поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу;
- уҡылған тексты йөкмәткеһен билдәләү, персонаждарын әйтеү;
- тексты исеме буйынса уның башҡарған ролен аңлата белеү;
- тексҡа исем ҡушыу өсөн терәк һүҙҙәрҙе таба белеү;
- текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.

**Яҙыу:**

- ҙур һәм юл хәрефтәрен матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу;
- ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу;
- текст, картина буйынса 2-3 һорауға яуап яҙыу;
- ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу;
- ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы диктант, изложение яҙыу.

2. **Уҡытыу һөҙөмтәләренә талаптар:**

1) **шәхси һөҙөмтәләр:**

- башҡорт теленең кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнөү;
- башҡорт телен һәм әҙәбиәтен халыҡтың милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итеү;
- яҙма һәм һөйләү телмәрен үҙ телендә үҙләштереү кимәле һәр бер кешенең мәҙәни яҡтан үҫешен баһалаусы билдә икәнлеген аңлау;
- үҙенең туған телендә һөйләшеү кимәлен баһалай белеү;

2) **метапредмет һөҙөмтәләр:**

- уҡыу мәсьәләләрен сискәндә туған телдә төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте табып, ҡуллана белеү;
- маҡсатына, мәғәнәһенә тап килтереп, аралашыуҙың төрлө ситуатив шарттарын һаҡлап, башҡорт телендә диалог ҡора белеү;
- аралашыу өсөн тейешле һүҙҙәрҙе табып, улардан һөйләм төҙөп, һорау бирә, үҙенә ҡарата бирелгән һорауға яуап ҡайтара белеү;
- үҙенең уй-фекерен әңгәмәсеһенә тулыһынса еткерә белергә тырышыу һәләтенең формалаша башлауы;
- һорауҙар бирә һәм бирелгән һорауҙарға яуап ҡайтара белеү оҫталығын үҫтереү;

3) **предмет һөҙөмтәләр:**

- башҡорт әҙәби теленең орфоэпик, лексик, грамматик нормалары тураһында ябай ғына төшөнсәләрҙе үҙләштереү;
- аралашҡанда башҡорт өндәрен һүҙ эсендә, һөйләмдә дөрөҫ әйтә, яҙма телмәрҙә дөрөҫ яҙа белеү;
- үҙ-ара аралашыу ҡағиҙәләрен үҙләштереү;
- орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен үҙләштереү (программаға ярашлы);
- өйрәнелгән кимәлдә өн, хәреф, һүҙ, һүҙ өлөшө, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра белеү;
- төрлө телмәр эшмәкәрлегендә (тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу) үҙ эшен баһаларға, кәрәк булһа, хатаһын төҙәтә белергә күнектерә башлау.